**Номинация:** “Методическая разработка”

**Тема: “Тылсымлы күбәләк”**

**Возраст:** средняя группа

**Подготовила:** Магафурова Диля Данияровна

**Тема “Тылсымлы күбәләк”**
**(уртансы төркөмдә белем биреү эшмәкәрлеге)**

**Маҡсат:** төрлө алымдар ҡулланып балаларҙы күбәләк менән таныштырыу

**Бурыстар:**

Белем биреүсе:

- балаларҙы күбәләк менән таныштырыу;

Үҫтереүсе:

- балаларҙың актив һәм пассив һүҙлеген байытыу;
- алған белемдәрен телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү;
- уйындар аша баланың ваҡ моторикаһын үҫтереү, төҫтәрҙе нығытыу;

Тәрбиәүи:

- күбәләккә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, ярҙам итеү теләге уятыу, һөйөү тәрбиәләү;
- рус телендә һөйләшергә өйтәтеү

**Методик алымлар:** сюрприз моменты – “Күбәләк” персонажы, бармаҡ уйыны, хәрәкәтле уйын, дидактик уйындар, һүрәт төшөрөү

**Һүҙлек эше:** күбәләк, оса, сәскә тажы, төрлө төҫтә, ҙур, бәләкәй,биҙәк. Бабочка, летает, большой, маленький, узор.

**Ҡулланылған материал:** телевизор, магнитофон, видеояҙма, аудиояҙма Чайковский “Йыл миҙгелдәре, **“**Күбәләк”- персонажы, таратма материалдар: ҙур һәм бәләкәй размерлы ҡырҡылған күбәләктәр, төрлө төҫтәге сәскә таждары, һүрәт төшөрөү өсөн күбәләк шаблоны, буяуҙар, салфетка.

**Ойошторou моменты:**

Төркәм бүлмәһендә “Күбәләк” - персонажы “осоп” йөрөй. Балалар, әйҙәгеҙ төркөмдө йыйыштырайыҡ та күбәләк менән уйнап алайыҡ. (Балалар төркөмдө йыйыштырған арала күбәләк “осоп” сығып китә).

**Тәрбиәсе.** Балалар күбәләк ҡайҙа булды ул?

(төркөм бүлмәһенән эҙләй башлайҙар).

Тәрбиәсе.Күбәләк үҙенең биҙәктәрен эҙләргә осоп сығып киткән. *(Төҫтәр ярҙамында балаларҙы бүлеү)*

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге барышы**

**Тәрбиәсе.** Балалар күбәләк биҙәген юғалтҡан. Нишләргә икән?

**Тәрбиәсе.** Күбәләк русса нисек була?

**Балалар**. Бабочка

**Тәрбиәсе.** Әйе, дөрөҫ.

Ярҙам итергә кәрәк.

**Балалар.** Күбәләккә биҙәктәрен табырға ярҙам итергә кәрәк.

**Тәрбиәсе.** Биҙәк русса нисек була?

**Балалар**. Узор

**Тәрбиәсе.** Әйе, дөрөҫ.
Ә нисек ярҙам итә алабыҙ?
**Балалар.** Биҙәктәрен табышырға.
**Балалар.** Биҙәк эшләп бирергә.
**Тәрбиәсе.** Ысынлап та беҙ уға ярҙам итә алабыҙ икән. Һеҙ әҙерме ярҙамға? Әйҙәгеҙ әле экран яннына киләйек.

Төркөмдә музыка ишетелә (В. И. Чайковскийҙың "Йыл миҙгелдәре" яҙмаһы). Балалар экран янына киләләр.

**Тәрбиәсе.** Экранда нимә күрәһегеҙ?
**Балалар.** сәскәләр, күбәләктәр, ҡояш
**Тәрбиәсе.** Сәскә, ҡояш, русса нисек була?
**Балалар**. Цветок, солнце
**Тәрбиәсе.** Әйе, дөрөҫ.
**Тәрбиәсе.** Балалар, ҡарағыҙ әле ниндәй матур тәбиғәт. Һүрәттә һеҙ нимә күрәһегеҙ?
**Балалар.** Сәскәләр. *(Балалар һүрәт буйынса һөйләйҙәр)*
**Тәрбиәсе.** Тағы һүрәттә нимәләр күрәһегеҙ?
**Балалар.** Ҡояш.
**Тәрбиәсе.** Ҡояш нисек йылыта?
**Балалар.** Ҡояш ныҡ йылыта.
**Тәрбиәсе.** Ни өсөн? (балаларҙың яуаптары)
**Балалар.** Эйе, ҡояш йылмайып ҡарап тора.
**Тәрбиәсе.** Нимәләр осоп йөрөй?
**Балалар.** Күбәләктәр.
**Тәрбиәсе.** Күбәләк нимә эшләй?
***Күбәләк оса*** (активлаштырыу)
**Тәрбиәсе.** Оса русса нисек була?
**Балалар** Летает
**Тәрбиәсе.** Әйе, дөрөҫ.
2- се слайд видеояҙма:
**Тәрбиәсе.** Ә бына күбәләктәр яҙ еткәнгә ҡыуанып осоп йөрөйҙәр.
Күбәләктәр ҡайҙа осорға яраталар?
**Балалар.** Күбәләктәр сәскәләр араһында осорға яраталар, сәскәләргә ҡуналар (активлаштырыу)
**Тәрбиәсе.** Балалар ҡарағыҙ әле, был күбәләктәрҙең биҙәктәре бармы?
**Балалар.** Юҡ
**Тәрбиәсе.** Улар һеҙҙән ярҙам һорап, беҙгә осоп та килеп еттеләр *(Магнит таҡтаһында төрлө төҫтәге күбәләктәр янына киләләр).*
**Дидактик уйын "Күбәләкте төҫө буйынса билдәлә"**

**Тәрбиәсе.** Ниндәй төҫтәге күбәләктәр осоп килгән?
**Балалар.** Күк, йәшел, ҡыҙыл төҫтә (активлаштырыу эше)
(Төҫтәрҙең русса переводын әйтәләр синий, зеленый, красный)
**Тәрбиәсе.** Ысынлап та улар ***төрлө төҫтә***. *(һүҙлек эше)*
**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ ҡырҡылған һүрәттәрҙе төҙөйөк.
**Дидактик уйын "Күбәләкте төҙө"** *(Өҫтәлдә төрлө ҙурлыктағы ҡырҡылған күбәләктәр ята. Балалар размерына ҡарап күбәләкте төҙөйҙәр һәм төҫтәрен нығытып үтәләр).*
**Тәрбиәсе.** Нимәләр килеп сыҡты?
**Балалар.** Был ҙур күбәләк. Был бәләкәй күбәләк.
(Большая, маленькая)
**Тәрбиәсе.** Балалар ҡарағыҙ әле, күбәләктең биҙәктәре бармы? (яуаптар)
**Тәрбиәсе.** Ә хәҙер бергәләшеп күбәләктәр булып уйнап алайыҡ. (*Музыка уйнай)*
**Ял минуты: хәрәкәтле уйын "Күбәләктәр"**
- Күбәләк, күбәләк
Осоп кил тиҙерәк.
Уйнап алайыҡ әле.
Осоп ҡарайыҡ әле.
*(Балалар күбәләктәр булып осоп йөрөйҙәр, тәрбиәсе күрһәтеүе буйынса төрлө хәрәкәттәр эшләйҙәр*)
**Тәрбиәсе.** Балалар, ә хәҙер күбәләктәрҙең осоуын бармаҡтар менән күрһәтәйек. (Бармаҡтар менән уйынды ҡабатлайҙар. Устарҙы бергә ҡуйып, бармаҡтарҙы бер – береһенә кейҙереү, осҡан хәрәкәт эшләү).
**Бармаҡ уйыны: "Күбәләк"**
**Тәрбиәсе.** Афарин, балалар. Бик матур күбәләктәр булдығыҙ.
**Дидактик уйын "Сәскә тажын йый"**
**Тәрбиәсе.** Балалар күбәләктәр ҡайҙа ҡунырға яраталар.
**Балалар.** Сәскәләргә
**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ күбәләктәргә үҙ сәскәләрен табып бирәйек.
**Тәрбиәсе.** Балалар былар нимә ул?
**Балалар.** Сәскә таждары *( активлаштырыу эше).*
**Тәрбиәсе.** Сәскә таждарынан сәскә төҙөр кәрәк. Төҙөү өсөн бер төрлө төҫтәге таждарҙы ғына ҡулланырға кәрәк. *(Балалар таждарҙан сәскә төҙәйҙәр)*
**Тәрбиәсе.** Афарин балалар. Бик матур сәскәләр килеп сыҡты.
**Тәрбиәсе.** Балалар һеҙ күбәләктәр өсөн бик матур сәскәләр йыйҙығыҙ.
**Тәрбиәсе.** Ә, күбәләктәрҙең биҙәктәре бармы?
**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ, улайһа күбәләктәргә биҙәктәр эшләйек.

**Һүрәт төшөрөү.** (Тәрбиәсе балаларға әҙер шаблондарға баҫма алымы менән биҙәктәр төшөрөп күрһәтә).

Музыка аҫтында балалар һүрәт төшөрәләр (тәрбиәсе балалар һайлаған төҫтәрҙе нығытып үтә)

**Тәрбиәсе.** Балалар, күбәләктәр үҙҙәренең сәскәләренә ултырырға теләйҙәр.

**Дидактик уйын "Күбәләккә сәскә һайла"** (һәр бала үҙенең биҙәгенең төҫөнә ҡарап күбәләкте шул төҫтәге сәскәгә ултыртырта)

**Тәрбиәсе.** Ә һинең сәскәң ниндәй төҫтә?

**Тәрбиәсе.** Ни өсөн ҡыҙыл (күк, йәшел) биҙәкле күбәләкте ҡыҙыл сәскәгә ултырттың?

(балаларҙың яуаптары, *активлаштырыу эштәре)*

**Тәрбиәсе.** Афарин балалар күбәләктәр үҙ сәскәләрен таптылар (эмоция өҫтөндә эш)

**Йомғаклау:** "Күбәләк" – персонажы килеп инә. Балалар менән уйын ойоштора. "Сәскә менән күбәләк" йыры яңғырай.

Ҡушымта.

**Таратма материалдар**.

- ҡырҡылған күбәләктәр,



- төрлө төҫтәге сәскә таждары.








- һүрәт төшөрөү өсөн күбәләк шаблоны.

